ҺИНДОСТАН МОСОЛМАНДАРЫ

Һиндостанда мосолмандар әҙселекте тәшкил итһә лә, Исламдың бай мәктәбенә таянып һәм үҙәренең был ил тарихында әүҙем ҡатнашыуҙарында һөҙөмтәһендә, дини асылдарын һаҡлайҙар. Мосолман халҡы Һиндостандың бөтә штаттарында ла бар.

Ислам үҙәктәре булдырып, улар мәҙәниәттә, динде һәм йолаларҙы теүәл үтәргә тырышалар. Һиндостандың танылған кино актеры, мосолман Шаһ Рух Хан дин тураһында шулай ти: “Минең өсөн дин - хәкикәтте табыу юлы. Мине бәләкәстән Ислам рухында, Ҡөрьән ҡиммәттәрендә тәрбиәләнеләр. Аллаһы Тәғәләгә һәм Исламдың барлыҡ терәктәренә ышанам. Тормош юлымдың мәғәнәһен аңлатыр өсөн Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) бер хәҙисе етә: “Үҙеңә бүтәндәрҙең ниндәй мөнәсә-бәттә булыуын теләнең, бүтән кешеләр менән дә шундай уҡ мөнәсәбәттә бул”. Мин миңә биргән бөтә нәмәһе өсөн дә Аллаһы тәғәләгә шөкөр итергә тырышам...”.

“Минең ҡарашым шулай, - ти актер, - үҙ динеңде тотоп, уның ҡануындарын үтә, ләкин һәр мәйөштә “мин мосолман” тип аҡырыу кәрәкмәй. Әгәр ҙә кемдер минән Ислам тураһында һорашһа, мин яуап бирәм, ләкин минең Ислам әһеле булыуым, иң әлек, минең тәртибемдә, үҙүҙемде тотоуымда, ғәмәлдәремдә сағылырға тейеш, ә һүҙҙә, йәки тышҡы ҡиәфәттә түгел...”.

Шаһ Рух Ханды “Болливуд короле” тип йөрөтәләр, һәм ул, ысынлап та, һинд халҡының иң яратҡан актеры. Д.Медведев үҙенең бер сәфәрендә Болливудта булғайны, унда талантлы актер менән осрашыуын матбуғат саралары ла киң яктыртты.

Һиндостан мосолмандары йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнаша. Уларға дин ҡануны буйынса йәшәргә тулыһынса хоҡуҡ бирелгән. Шуны ла әйтергә кәрәк, Һиндостан - хажға барыусыларҙың авиабилет хаҡын тулыһынса үҙе түләүсе берҙән-бер ил.

2002 йылдан Һиндостанда хаж мәсьәләләрен хәл итеүсе айырым комитет эшләй башлаған. Ул сит ил эштәре министрлығының бер бүлеген тәшкил итә. Шәхси агенттарҙың да хажға ебәреү хоҡуғы бар, ләкин был комитет хажға барыусыларҙың самолет хаҡын кәметеү буйынса ярҙам итә. Тик бер генә нескәлеге бар: хажға тигән ғаризаларға йәрәбә һалына, йәғни кем бара, кем юҡ икәнлеген йәрәбә хәл итә. Һиндостан хөкүмәте йыл һайын бер нисә хаж рейсы ойоштора.

Һуңғы йылдарҙа Һиндостанда бүтән диндәрҙән Исламға күсеүселәр һаны күбәйҙе. Калифорния университеты профессоры Перия Даршан әфәнде Исламды ҡабул иткәндән һуң, сәбәбен аңлатып шулай тине: “Ислам - Аллаһы Тәғәлә индергән Китап буйынса йәшәүсе берҙән-бер дин. Мин сағыштырма диндәрҙе өйрәнәм, бүтән диндәрҙәге яҙмаларҙың үҙгәрешкә дусар ителгәненә инандым, Ҡорьәндең Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.) аша индерелеп, үҙгәрмәйенсә беҙҙең көндәргә килеп еткән берҙән-бер Китап икәненә иманым камил”.

Абдулла тигән исем алған был профессор уҡытыусылыҡ эшенән тыш, танылған “Карутхамма” тигән фильмда төштө, унда мәзин ролен башҡарҙы. “Оҙаҡ йылдар мине инанған атеист тип белделәр, - тип әйтә профессор, - Аҙаҡҡы торо диндең кеше өсөн берҙән-бер ҡотолоу юлы икәнен аңланым. Яҡын арала үмрәгә (кесе хаж) йыйынам, Мәккә менән Мәҙинәне беренсе тапҡыр барып күрәсәкмен”.

Икенсе бер һинд актеры Йыһангир Вәкил кино һөйөүселәргә “Балтика Вадху” тигән сериал аша яҡшы билдәле. Ҡыйыу, үҙенә ышанған, уңышлы, даланлы яҙмышлы актер, Ислам каналындағы бер тапшырыуҙы ғына ҡарап, шул дингә күсер тип, берәү ҙә башына килтермәгәндер. Хәҙер Йыһангир - бөтөн ҡанундарҙы үтәүсе иманлы мосолман. Үҙе әйтеүенсә, ниһайәт, ул “йән тыныслығын һәм йәшәү мәғәнәһен” тапты.



■ Ихласлыҡ

УРАҘА
һәм намаҙ кешеләре

Хәлид әр-Рәшид

Нигерҙағы Жәннә мәсете доньяла балсыҡтан һалынған иң ҙур ҡорам булып тора

Нигерийҙарҙы бушҡа ғына “Ураҙа һәм намаҙ кешеләре”, тип йөрөтмәйҙәр. Улар, фәкир йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, Ҡөрьән уҡыуҙа, уны яттан һөйләүҙә, ураҙала ризыҡ таратыуҙа үҙ-ара ярышалар. Нигерҙә тағы ла бер күренеш беҙҙе ғәжәп итте. Рамаҙан айының тәрауих намаҙҙарында бындағы имандаштарыбыҙ Ҡөрьәнде ике-өс тапҡыр уҡып сығалар. Бынан тыш, намаҙҙарын ахшамдан алып, фәжергә (таңға) тиклем дауам итәләр.

Ураҙаның тәүге ун көнөндә “Сөннә ярҙамсыһы” тигән ойошма саҡырыусы буйынса, беҙгә Бенин менән сиктәш урынлашҡан Маланвил тигән ауылда булырға тура килде.

Аллаһы Тәғәлә менән ант итеп әйтәм, бында көн күреүселәр, ысынлап та, Аллаһ ярҙамсылары! Өйҙәре әсендә Ҡорьән уҡыған тауыш бер сәғәткә лә туктамай. Музыка-йыр тигән нәмә бөтөнләй ишетелмәй. Әр-Рахмандың аяттары иһә бөтөн ерҙә лә яңғырап тора. Беҙ ауылға мәғрибтән һуң килеп төшкәйнек. Халыҡ ифтар менән һыйланы. Уларға ҡушылып, йәстү намаҙын, артабан, сәғәттән ашыу тәрауих намаҙын уҡыныҡ. Шунан шәйех әйтте: “Бер аҙ ял итеп алығыҙ ҙа, бергәләп ҡыям уҡырбыҙ, 12-ләрҙә башларбыҙ Инша-Аллаһ”. Минең: “Ул ҡасан тамамланыр икән?” - тигән һорауыма: “Аллаһы теләгән ваҡытта”, - тигән яуап алдым. “Нисәгә тиклем була инде?” “Фәҙәттә, биштә, иртәнге аҙанға тиклем тамамлай торғайныҡ”, Быны ишеткәс, иптәшемә: “Сүбхәнә-Аллаһ! - тип кенә әйтә алдым, - Биш сәғәтлек тәнгә ҡыям (ҡыям әлләйл). Беҙҙең хәл етерме икән?” “Аллаһтан ярҙам һорарбыҙ”.

Тәнгә 12-лә беҙ мәсеткә инһәк, ул намаҙға килгән йәшәкарты, бала-сағаһы менән лыҡа тулы ине инде. Ә тышта йыйылған халыҡ тағы ла күберәк. Ҡатындар өсөн айырым урын хәстәрләнгән. Имамдарыбыҙ ике үҙмер булып сыҡты. Әлегәсә шул тиклем дә матур тауыш менән Ҡорьән уҡығандарын ишеткәнебеҙ ҙә юҡ ине. Имандың бына ошондай һоҡланғыс солғанышында сәғәттәр минуттай үтте лә китте.

Намаҙ уҡыусыларға һыу эсереп китеүселәр булды. Ярты сәғәтлек тәнәфес мәлендә беҙҙән дә вәғәз һымаҡ берәй нәмә уҡыуыбыҙҙы үтенделәр. Бер үҙмер тәржемә итеп торҙо. Шуны ла әйтергә кәрәк, нигерийҙар араһында ғәрәп телендә яҡшы, йәки камил һөйләшкәндәр бар. Кешеләрҙән “Лә иләһә иллә-Аллаһ”, “Аллаһу әкбәр”ҙән тыш бүтән һүҙ ишетмәнек тә. Ә беҙ бит сүллектәге фәкир генә бер ауылға килгәнбеҙ. Сүллек уртаһында урынлашыуы ғына ла уның күп нәмәгә мохтажлыҡ кисереүе тураһында һөйләй. Был ауыл халҡы Аллаһтың динендә фиҙакәрлек күрһәтә, мөъминдәр Исламдың бөйөк байрағын юғары тотоп йәшәй!

Кешеләр ауылдан һуманитар ярҙам менән килгән насрани ойошмаларын ҡыуып ебәреүҙәрен һөйләне. Тегеләрҙең ярҙамынан баш тарткандар, бер нәмә лә алмағандар.

Ҡөрьән дәрестәрендә ултырған бала-сағаны ла да күреү насип булды. Мөғәллимдәренән: “Уларҙы нимәгә өйрәтәһегеҙ? Ниндәй китаптан уҡытаһығыҙ?” - тип белештек. Дәреслектәрҙе күрһәттеләр. “Фатх әл-Мәжид”, йәнә “Тәүхид” китабына шәрех (комментарий) - барыһы ла дөрөҫ аҡыда китаптары, улар аҙашҡандарҙың һәм яңылыҡ индереүселәрҙең (бидғәселәрҙең) китаптарына яуап булып тора. Шәйех Абду-р-Рахман ас-Саадиҙың “Әл-Ҡәүлү Садид”ы ла бында бар. Аллаһ менән ант итәм, был китаптарҙы мин уларҙа таптым!

Хушлашҡанда: “Ике Изге мәсет янында йөшәгән туғандарығыҙҙға һеҙҙән ниндәй сәләм тапшырайым?” - тип һораным. Улар шулай тине: “Уларға: “һеҙҙе сүллек эсендәге Ислам саҡыра. Һеззе ике Изге мәсет янында йәшәүселәрҙе саҡыра”, тип әйтегеҙ. Йәнә лә шуны әйтергә онотмағыҙ: Ислам көслө һәм ғорур дин, һәм насраниҙар беҙҙең ризыҡҡа-һыуға, дарыуға мохтажлыҡ кисереүебеҙ менән, аслыҡтан файҙаланырға тырыша. Ләкин беҙ бирешмәйбеҙ. Беҙ мосолман булып көн итеп, мосолман булып был донъянан китәсәкбеҙ. Хатта һеҙ беҙҙе онотһағыҙ ҙа, Аллаһы Тәғәлә беҙҙе онотмаясаҡ, тип әйтегеҙ!”

■ Үҙебеҙ һәм динебеҙ

БЕР ТАРИХҠА ИКЕ ҠАРАШ

Али Вячеслав ПОЛОСИН

Һуңғы йылдарҙа көнбайыш секталары Рәсәй, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Әзербайжан һәм Төркиә мосолмандарын үҙҙәренә йәлеп итеү өсөн ҙур көс түгә. Был йәһәттән айырыуса “свидетели Иеговы”, “адвентисты седьмого дня”, мормондар һәм үҙҙәрен “Файса сиркәүе” атаусылар, йәнә лә бер нисә неопротестант сиркәүе тырышлыҡ күрһәтә. Неопротестанттар 2000 йылда Мәскәүҙә “Авраам балалары” тигән үҙәк төҙәй, уның маҡсаты - Мәскәүҙәге һәм Мәскәү әргәһендәге төркиҙәрҙе христианлаштырыу. Ҙур тираждар менән татар, башҡорт, төрөк, авар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә Библия нәшер ителә башлай.

Үҙ инаныуыңды вәғәзләү - һәр кемдең хоҡуғы. Тик әле телгә алынған осраҡта беҙ бик йомарт финансланған прозелитизм (икенсе дингә күсереү) ағымына ҡуйылған йүнәлеш менән осрашабыҙ, һәм ул айырыуса бик үҡ дини ғилеме булмаған мосолмандарға асыҡ төбәлгән. “Яңы” насрани йәки иегово ойошмаһына йәлеп итеү православие һәм ислам динендәге ярлы ҡатламды һатып алыу юлы менән башҡарыла. Уларҙы беҙ атап үткән секта һәм сиркәүҙәрҙең сараларына ҡатнаштырыу өсөн гуманитар ярҙам тараталар.

СССР-ҙа 70 йыл буйы динде өйрәнеү тыйылғанлыҡтан халыҡтың был өлкәлә белемһеҙлеге ундай “гуманитарҙар” өсөн ҙур ярҙам булып тора. Атеистик эҙәрлекләүҙәрҙән бигерәк тә мосолман халҡы оло зыян күрҙе: уларҙың дин әһелдәрен айырым теүәллек менән ҡырҙылар - хатта ғәрәп телендә китап һаҡлағаны өсөн генә лә кешеләрҙе аттылар, батырҙылар, лагерҙарҙа серетте-ләр. Аҡсалы көнбайыш миссионерҙары өсөн был өҫтөнлөккә әйләнде, үҙҙәренең ҡармаҡтарына эләктерер өсөн улар төрлө саралар ҡулланалар. Уларҙың был ғәмәлдәренән мосолмандар ғына түгел, атеистик ҡыҫырыҡлауҙы кисергә православие динендәгеләр ҙә зыян күрә. “Рухи пирамида”ны тоҫмаллаткан был алымды “дини браконьерлыҡ” тип тә атарға була. Бер үзбәк ҡатын газетаға ялыу яҙып ебәргән: насрани диненә күсһә, уға 100 доллар вәғәҙә иткәндәр. Ҡатын ризалаша, тик шуның 50 долларын ғына биргәндәр, тағы ла кемделер был дингә күсерһәң генә ҡалған суммаңды ала алаһың, тиҙәр икән...

1800 йылдан 1950 йылға тиклем насраниҙар тарафынан исламға ҡаршы 60 меңдән ашыу китап яҙылған, был һан йылдан-йыл арта бара. Мосолман халыҡтары араһында профессиональ эш алып барыусы протестант миссионерҙарының яҙмалары рус теленә лә тәржәмәләнә һәм нәшер ителә. Мәҫәлән, ғәрәп илдәренә радио аша 30 йыл буйы тапшырыу алып барыусы Бессам М.Меданиҙың “Мосолманға Инжилды нисек шаһитлыҡ итергә” тигән китабы донъя күрҙе. “Адвентисты седьмого дня” иһә “Фәкәт Аллаһ ҡына хаҡ донъяны бирә ала!” тигән брошюраны нәшерләй. Ул тыштан ҡарағанда мосолмандыҡы һымаҡ, ләкин эсенә икенсе мәғәнә һалына - Аллаһ Үҙенең рәсүлен үлтермәй тороп, кешелекте ҡоткара алмаҫ ине, тип ышандырырға тырышыу. Дон Мак-Кэрриҙың “Авраамдың һынған ботағын дауалау. Мосолмандарға яҡшы хәбәр” тигән китабы ябай мосолмандарҙы имандан яҙҙырыу өсөн энциклопедик ҡулланма булып тора. Был яҙмалар. Ҡөрьәнде “ентекле байҡай”, насраниҙарҙың “илаһкеше” (“богочеловек”) тигән ғилеме Аллаһ тарафынан индерелгән тип күрһәтәлә. Насраниҙарҙың мосолман халыҡтарында таратыла килгән “Новый завет”тары хәҙер “Инжил (“яҡшы хәбәр”) тип атала. Аҫтыртын маҡсаттары шунда: уны Ҡөрьәндә телгә алынған Ғайса тарафынан йәһүдтәргә индерелгән шул уҡ Инжил тип ышандырырға тырышалар. Ғайса пәйғәмбәрҙе “Иса Мәсих” тип атайҙар. “Новый завет”тағы фразалар “этник мосолмандар” өсөн ғәрәпсә яңғыраған һамаҡ, ә ысынбарлыҡта Ҡөрьәнгә ҡапма-ҡаршы фекер әйтелә: “Иманға килгән кеше һәләк булмаһын һәм мәңгелек тормош тапһын өсөн, Аллаһ Үҙенең улы Иса Мәсихте ҡорбан итте” (Аллаһ уны кемгә ҡорбан иткән - быныһы әйтелмәй).

Бына шул рәүешле насрани миссионерҙарының һәм “Свидетели Иеговы” тигәндәренең өгөтнәсихәттәре түбәндәгесә: Аллаһтың Ғайса аша “Инжил”ды индерелеүе тураһында Ҡөрьәндән аяттар килтерелә, һуңынан насраниҙарҙың рәсми “Новый завет”тары тәҡдим ителә һәм әйтелә: был һеҙ өйрәнергә тейеш “Инжил”, ә Сөннәтте ғәрәптәр уйлап сығарған, ул, йәнәһе, Аллаһтың әмерен боҙоу. Бынан ары инде һиҙҙермәй генә Ҡөрьәнде “ситкә этерлек” насрани диненең дөрөҫлөгө тураһында цитаталар ташҡыны китә, ә артабан гуманитар ярҙам вәғәҙә итеп, сиркәү хеҙмәтенә саҡырыу һәм сектаның әҙәбиәтен таратыу башлана.

Ҡайһы бер яңы насрани ойошмалар психокодлаштырыу йолаһын аткаралар: бер нисә сәғәт буйына ниндәйҙер “изге рухты саҡырыу” сараһы үткәрәләр, ул бер нисә сәғәт дауам иткәндән һуң, кешеләр хәлдән тайып иҙәнгә ҡолайҙар, ниндәйҙер аңлайышһыҙ һүҙ бутҡаһы бешерә башлайҙар (“икенсе телдәрҙә һөйләү”).

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, неопротестанттар ғына түгел, ҡайһы бер ультрарадикаль ойошмалар православик исеме менән исламға ҡаршы яҙмалар нәшерләүҙәрен дауам итәләр (дәйәм алғанда, мосолмандар һәм православныйҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте сабыр). Йәнә лә шул, дәлилдәре булмау сәбәпле, уларҙың ҡайһы бер хеҙмәттәре Рәсүлде һәм ислам тәғлимәтен әрләүгә генә ҡайтып ҡала. Максим Исповедникты, Игнатий Брянчаниновты һәм уларҙың эштәрен урынлаштырыусы, татарҙарҙы насрани диненә саҡырыусы прозелитик Интернет-сайты миҫалға килтерергә була.

Миссионерҙарҙың агрессив прозелитик эшмәкәрлеге ҡыҫымына дусар ителгән Рәсәйҙең һәм БДБ-ның традицион динен тотоусы һәр гражданы үҙенең законлы хоҡуғын яҡлай ала. Бына шуға күрә сағыштырмаса дин ғилеме буйынса мосолман ҡарашынан яҙылған дәреслектәр кәрәк, шулай уҡ мосолман-насрани фекер алышыуҙар буйынса ла ҡулланма сығарыу ихтыяжы бар. Был ҡулланмала Ҡорьәнгә һәм шәриғәткә һөжүм итеүселәргә, аңлы рәүештә Аллаһ ҡанундарын икенсе дин институттары ҡарашы менән алмаштырырға маташҡандарға асыҡ һәм тәфсирле яуап булырға тейеш. Беҙҙең маҡсат - үҙебеҙҙе яҡлау, көнбайыш миссионерҙарының аҫтыртын ниәттә Аллаһы Тәғәләнең әмерен һәм ҡанундарын боҙорға тырышыуҙарына ҡаршы тороу, яҡлау, мосолмандарҙы гонаһтан һаҡланырға саҡырыу.